**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү**

Бала – бөйөк хазина, асылмаған сер, тибеҙ. Ысынлап та баланың күңелендә тәрәнгә йәшеренгән аҫыл таштар һымаҡ, хазина бар. Баланың күңеленә юл таба алыу, һәләтен күрә белеү – шул хазина табыуға тиң. Бөтә балалар ҙа бер төрлө түгел, әммә һәр бала үҙенсә һәләтле.

Һәр уҡытыусының төп бурысы булып, уҡыусыларға төплө белем биреү генә түгел, ә һәр баланың шәхес үҫешенә дөрөҫ йүнәлеш биреп, индивидуаль һәләттәрен асыу, ижади һәләтле шәхес тәрбиәләү бурысы ла беренсе урында торорға тейеш.

**Эшемдең төп маҡсаттары:** уҡыу – уҡытыу тәрбиәләү эш барышында балаларҙың индивидуаль, ижади һәләттәрен асыу, ижади фекерлеүҙәрен үҫтереү һәм тормошҡа ашырыу.

**Төп бурыстарым**:

- Төрлө алымдар ҡулланып уҡыусыларҙың үҙ-аллы танып белеп активлығын үҫтереү;
- Уҡытыу-тәрбиәләү сифатын арттырыу маҡсаттарында яңы технологияларҙы өйрәнеү, уңышлы алымдар ҡулланыу;
- Үҙ белемемде үҫтереү эшен даими алып барыу;
- Алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһен өйрәнеү, тәжрибә уртаҡлашыу.

Балаларҙа башҡорт теленә, тыуған илгә, байрамдарға, тәбиғәткә, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә һөйөү тәрбиәләүҙә ижади эш ҙур урын алып тора һәм уҡыусыларҙың тел байлығын, телмәр үҙенсәлеген, үҙаллы фекерләү һәләттәрен үҫтерергә ярҙам итә.

Инша, хикәйә, шиғыр яҙырға өйрәтеү балаларға яҡшы таныш булған темаларҙан тора. Мәҫәлән, “Минең кәйефем”, “Мин нимә яратам”, “Беҙҙең өйҙә”, “Тыуған илем”, “ Ватанды һаҡлаусылар көнө” һ.б. Уңышлы һайланған тема үҙе үк материалды ҡайҙан һәм нисек йыйыу юлын күрһәтә. Иң мөһиме уҡыусыларҙың күҙәтә белеү күнекмәләрен үҫтереү. Быға ирешеү өсөн күҙәтеү ысулын, тәртибен булдырыу шарт. Эш әйберҙәрҙең үҙенсәлекле билдәләрен айырырға, тойорға өйрәтеүҙән башлана. Шулай уҡ, материал йыйыуҙы еңелләштереү өсөн алдан тема буйынса һорауҙар әҙерләргә мөмкин. Иншаға материал художестволы әҫәрҙәрҙән дә һайлана. Был эшкә лә балаларҙы өйрәтергә кәрәк. Үҙ фекерен уҡыусылар китаптан миҫалдар менән дә нығытырға тейеш. Ижади диктанттар, инша элементтарын үҙ эсенә алған изложенияларҙы

төрлөсә ойошторорға була. Мәҫәлән, текст иң ҡыҙыҡлы ерендә өҙөлә, артабан уҡыусылар үҙ аллы дауам итәләр, уҡытыусы тексты уҡый, уҡыусылар йөкмәткеһен яҙмай, төп геройға йәки ваҡиғаға ҡылыҡһырлама бирәләр. Изложениялар өҫтөндә эшләгәндә, уҡыусылар теге йәки был әҫәрҙең темаһын, сюжетын, композицияһын билдәләргә, мәғәнәһен аңларға, персонаждарға дөрөҫ баһа бирергә өйрәнәләр. Был эш төрө, шулай уҡ, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөү һәм яҙа белеү һәләтлелектәрен үҫтереүҙә лә ныҡ ярҙам итә. Тәрбиә мәсьәләһен хәл итеүҙә уның өҫтөнлөгө йәнә шунда: ижади иншалар уҡыусыларҙы тормош менән яҡынайта, тәнҡитле ҡараш тәрбиәләй һәм уйланырға өйрәтә.

Ижади эштәр яҙырға өйрәнеүҙә балалар матбуғатының роле ҙур. Ни өсөн тигәндә унда балаларҙың әкиәттәре, шиғырҙары һәм мәҡәләләре сыға. Ошо гәзит-журналдар аша бындай эштәргә ваҡыты – ваҡыты менән күҙәтеүҙәр, анализдар яһау бик мөһим. Шуға күрә лә бөгөнгө көндә гәзит – журналдар жанрҙарына бәйле ижади эштәр яҙып өйрәнергә тырышабыҙ.

Ә инде шиғыр яҙыуға туҡталып киткәндә уҡыусылар был эште ысын күңелдән башҡаралар. Әгәр ҙә йылдың башында бер-ике уҡыусы ғына шиғыр яҙһа, бөгөнгө көндә бик күп талантлы балалар шиғыр ижад итеүҙе яҡын күрәләр. Ҡайһы бер уҡыусыларҙың телдәре ярлы булыу сәбәпле һүҙлектәр менән дә эш итергә тура килә.

Яҙған ваҡытта кеше билдәле фекерҙең ҡайҙа, ҡасан, ниндәй маҡсатта яҙылыуына, кемгә төбәлгән булыуына ҡарап, һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе һайлап файҙалана.

Тел сараларын шул рәүешле билдәле маҡсатта һәм аралашыу мөмкинлегенә ярашлы итеп һайлап, уларҙы телмәрҙә төрлө мәғәнә һәм хис-тойғо биҙәктәре биреп ҡулланыу телдең тарихи үҫешендә объектив формалашҡан һәм үҫкән, айырым система рәүешендә йөрөтөлгән стиль төрҙәрен барлыҡҡа килтерә. Уларҙы лингвистикала функциональ стилдәр тип йөрөтәләр.

Элементтар стилистик күнекмәләрҙең ҡайһы берҙәрен уҡыусылар башланғыс кластарҙа уҡ алалар: синонимдар, антонимдар ҡулланыу, диалектизамдарҙы ҡулланмаҫҡа тырышыу, һөйләм конструкцияларының төрҙәрен файҙаланыу, текстарҙың стилен билдәләү (әкиәт, хикәйә, шиғыр, фәнни-популяр мәҡәлә һ.б.), төрлө стилдә бәйләнешле текстар төҙөү.

Тәнҡитле фекрләү алымын ҡулланыу балаларҙың дәрестә танып белеү активлығын арттыра, фекрләү һәләтен үҫтерә. Тәнҡитле фекерләү алымы өс кимәлдән тора: 1 – саҡырыу, уҡыусы белгәнен анализлай, яңы тема буйынса нимә өйрәнергә кәрәклеген асыҡлай. 2 – уйлау, фекерләү, яңы мәғлүмәтте үҙләштереү. 3 – рефлексия, уҡыусыларҙың үҙләштереү кимәле тикшерелә һәм синквейн алымы буйынса тос фекерҙәр менән балалар үҙҙәре үк йомғаҡ яһайҙар.

Шулай уҡ балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү өсөн проект технологияһын һәр ваҡыт тейерлек ҡулланам. Проект технологияһының бер төрөнә эҙләнеү проектына туҡталып китер инем.

Эҙләнеү прокты башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре өсөн бигерәк тә әһәмиәтле. Ул уҡыусының ихтияр көсөн, үҙ-үҙенә ышаныcын, ижади мөмкинселектәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Уҡыусы билдәле бер тема өҫтөндә ижади эшләргә, төрлө сығанаҡтарҙы ҡулланып, үҙ аллы мәғлүмәт табырға өйрәнә. Эште ойоштороу барышында уҡытыусы үҙ –ара аралаша, бер-береһенә йоғонто яһай, уҡыусы менән teләктәш була ала. Шулай итеп, бөтә уҡыу процесы уҡыусыға йүнәлтелә, уның ҡыҙыҡһыныуы, тормош тәжрибәһе һәм шәхеси һәләттәре иҫәпкә алына, конкрет проект буйынса уҡыусыға конкрет эшкә индивидуаль һәм коллектив яуаплылыҡ уята. Кабинетта компьютерҙар булғас эште дәрестә лә, түңәрәк эшендә йәки махсус курстарҙа алып барам.

Уҡыусыларҙың ижади эштәре 2005 йылдан алып 2019 йылға тиклем гимназиябыҙҙың “Инеш башы”, “Илһам шишмәләре” фестиваленә сығарылған “Йәйғор” шиғырҙар йыйынтыҡтарында сығарылды, шулай уҡ Башҡорт гимназия-интернатының “Ынйылар” гәзитендә һәм республикабыҙҙың “Аманат”, “Аҡбуҙат”, “Йәншишмә” гәзит-журналдарында ай һайын тейерлек баҫтырылып тора.

Һәр уҡыусының ижади эштәре өсөн айырым папкалар булдырылды. Киләсәктә үҙ эшенә ижади ҡараған уҡыусылар яҙмышын юғары уҡыу йорттарының филология факультеттары менән бәйләргә уйлаһа, был папкалар кәрәгер тип уйлайым.

Ижади эшләүсе уҡытыусының уҡыусылары ла үҫешкән, донъяға киң ҡарашлы, үҙ туған теленә, әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә, үҙен уратып алған мөхиткә битараф булмай.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!